**8 – се класс уҡыусылары өсөн**

**башҡорт теленән**

**контроль эш тексы**

# Янғантау

Беҙҙең Башҡортостанда Янғантау шифаханаһы бар. Бынан күп йылдар элек унан эҫе газ һәм пар сыға башлаған.Ошо ерҙә йәшәгән кешеләр ул парҙың файҙалы булыуын белеп алған.

Уны башта бер көтөүсе ҡарт асҡан.Ҡарттың аяҡтары ныҡ һыҙлаған. Тауҙа көтөү көткәндә аяҡтарын пар һәм газ сыҡҡан ергә ҡуйып ултырған. Бер ай самаһы ваҡыт үткәндән һуң, аяҡтарының һыҙлауы баҫылған. Хәҙер был урында Янғантау шифаханаһы төҙөлгән. Ул бөтә илгә билдәле . Саф һауа , таҙа һыу, эҫе газ һәм пар , матур тәбиғәт кешегә һаулыҡ бүләк итә. (81 һүҙ.)